# Башҡорт йәштәрен берләштереп

Майҙа Өфөлә, Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәй составына инеүенең 450 йыллығына арнап, Башҡорт йәштәре иттифағының республика съезы уҙғарылды. Съезда республика ҡалаларынан һәм райондарынан башҡорт йәштәре иттифаҡтары рәйестәре, шулай уҡ Ырымбур, Силәбе өлкәләренән килгән делегаттар ҡатнашты. Унда Башҡорт йәштәре иттифағының республикала патриоттарҙы тәрбиләү, рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрҙе үҫтереү, йәштәр араһында сәләмәт тормош алып барыуҙы пропагандалау әһәмиәте билдәләнде, йәштәр араһында һөйөү яулаған ”Йәшлек-шоу”, төрки йәштәренең ”Урал моңо” Халыҡ-ара музыка ижады фестивале, ”Һылыуҡай” конкурсы кеүек ҙур сараларҙы ойоштороуҙа роле юғары баһаланды.

Башҡорт йәштәре иттифағының эшмәкәрлеге, ирешелгән маҡсаттары, ҡуйылған бурыстарының үтәлеү-үтәлмәүе, киләсәккә пландары, эш йүнәлештәре хаҡында иттифаҡ рәйесе Фәүзил Маликовтың отчет доклады тыңланды. Район-ҡалаларҙан килгән делегаттар, Силәбе, Ырымбур өлкәләренән саҡырылған ҡунаҡтар урындағы эшмәкәрлек, уның һөҙөмтәләре хаҡында һөйләне, проблемалар күтәрҙе. Бөтә Донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Йәштәр советы рәйесе Тимур Лоҡманов ”Башҡорт йәштәренең беренсе халыҡ-ара ҡоролтайын үткәреү тураһында” докладын тәҡдим итте һәм сығышында донъяуи кимәлдә, Рәсәй Федерацияһының башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрендә, сит илдәрҙә башҡорт йәштәрен берләштереү, уларҙы тупларлыҡ ойошма булдырыу хаҡында телмәр тотто. Башҡорт йәштәренең бөгөнгө проблемаларына, милли кадрҙар мәсьәләһенә туҡталып үтте.

Сара сиктәрендә Башҡорт йәштәренең республика съезы резолюцияһы ҡабул ителде, шулай уҡ Беренсе Бөтә донъя башҡорт йәштәре ҡоролтайына әҙерлек буйынса саралар планы төҙөлдө.

Ҡабул ителгән резолюцияла Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәй составына инеүенең 450 йыллығына әҙерлек саралары планын ҡабул итеү, республика етәкселегенән башҡорт халҡының рухи һәм әхлаҡи ҡиммәттәрен тергеҙеү һәм һаҡлап ҡалыу, башҡорт йәштәренең ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүгә булышлыҡ итеүен һорау, Беренсе Бөтә донъя башҡорт йәштәре ҡоролтайын ойоштороу һәм уҙғарыуҙа актив ҡатнашыу тураһында юлдар бар. Съезда Беренсе Бөтә донъя башҡорт йәштәре ҡоролтайында ҡатнашасаҡ делегаттарҙы һайлау принциптары, сараны ойоштороу комитеты составы билдәләнде.

*Морат ГАРИФУЛЛИН.*